Рәсәй Федерацияһының мәғариф министрлығы
Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министрлығы
“Башҡортостан Республикаһы Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең
Мәғариф бүлеге” муниципаль ҡаҙна учреждениеһы
Башҡортостан Республикаһы Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округының
“Владимир Алексеевич Секин исемендәге 3-сө лицей”
муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы

Методик кафедра ултырышында
ҡаралған
4-се һанлы протокол
« 29» август 2025 й.
Методик кафедра етәксеһе
_____/Л.Ғ.Насирова/

Килешелгән
директор урынбаҫары
_____/Н.Б.Переведенцева/
«29» август 2025 й.

29.08.25 й. 308-се
һанлы
бойороғо менән
раҫланған
Директор
_____/Л.В.Тәһирова

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметы буйынса
урта дөйөм белем биреү
эш программаһы

(белем биреү ойошмаларының 5-9-сы кластары өсөн)

Аңлатма яҙыу

Төп дөйөм белем биреү кимәленә «Туған (башҡорт) әҙәбиәте » уҡыу предметынан 5-9-сы кластар өсөн төп дөйөм белем биреү программаһы нигеҙендә федераль дәүләт белем биреү стандарттарының системалы-эшмәкәрлекле йүнәлеш ята.

Программа башҡорт теле уҡытыусылары өсөн белем биреүҙә яңы тенденциялар һәм актив методикалар ҡулланыуға йүнәлдерелгән.

Программа уҡытыусыға:

1) туған әҙәбиәтен уҡытыу процесында Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында формалашҡан шәхсән, предмет, метапредмет һөҙөмтәләргә өлгәшеүҙең хәҙерге йүнәлештәрен тормошҡа ашырыу;

2) «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметының планлаштырылған һөҙөмтәләрен һәм йөкмәткеһен федераль дәүләт белем биреү стандарттарына; төп дөйөм белем биреү өлгө төп дөйөм белем биреү программаһына; өлгө тәрбиә программаһына яраҡлы һәр уҡыу йылына билдәләү һәм структурлаштырыу;

3) билдәле бүлек/теманы өйрәнеүгә бүленгән яҡынса уҡыу сәғәттәрен, шулай уҡ бүлек/теманың уҡыу материалын үҙләштереүгә тәҡдим ителгән төп уҡыу эшмәкәрлеген ҡулланып, тәғәйен класс үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, календарь-тематик планлаштырыуҙы эшкәртеү.

Программа йөкмәткеһе Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предмет өлкәһендә бирелгән төп дөйөм белем биреүҙә төп дөйөм белем биреү программаһының талаптар өлөшөндәге өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе үҙләштереүҙе тәьмин итә.

Программа нигеҙендә федераль дәүләт стандарттарының методологияһын тәшкил иткән системалы-эшмәкәрлекле йүнәлеш ята.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметының өйрәнеүҙең бурыстары**:**

– телмәр тотҡарлығын һәм башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ ҡулланыуҙы үтеүөсөн уңайлы психологик климат булдырыу;

– яңы теманы үҙләштереү барышында уҡыусыларҙың шәхси сифаттарын, уларҙың күҙҙаллауын, иғтибарын, хәтерен үҫтереү;

– элементар лингвистик күҙҙаллауҙы үҙләштереүгә йүнәлдерелгән, уҡыусыларҙың элементар кимәлдә телдән һәм яҙма телмәрен үҙләштереү өсөн аңлайышлы һәм кәрәкле булғанлингвистик күҙҙаллауҙы киңәйтеү.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметын өйрәнеүгә 169 сәғәт бирелә: 5-се кластан 9-сы класҡа тиклем (аҙнаға 1 сәғәт) 34-әр сәғәт.

Белем биреү ойошмалары уҡыу предметын өйрәнеүгә бүленгән, белем биреү мөнәсәбәтендә ҡатнашыусылар формалаштырған план өлөшөндәге сәғәттәр иҫәбенән үҙаллы сәғәттәр һанын арттыра ала.

Уҡыу курсының йөкмәткеһе

5-се класс

Көҙ. С.Муллабаев ”Шатлыҡлы иртә”шиғырында Белем көнө.Б.Бикбайҙың “Туғантел”,Р.Ғариповтың“Туған тел” шиғырҙарында туған телде данлау.

“Әминбәк”әкиәтендә уҡыу, белем, һөнәр алыуҙың әһәмиәте.К.Кинйәбулатованың “Көҙ еткәс”, Ф.Рәхимғолованың “Көҙгө Урал” шиғырҙарында көҙ миҙгеле. Р.Ғариповтың “Торналар”, Н.Иҙелбайҙың “Дүрт миҙгел”шиғырҙарында көҙгө тәбиғәттең

тасуриланышы.Н.Ноғомановтың “Йәйбикә менән Көҙбикә” әҫәрендә сағыштырыу.М.Кәримдең “Сыйырсыҡ” хикәйәһендә ҡоштар.Ә. Әминевтың “Тыуған ер”, Д.Бураҡаеваның“Урал тауҙары”әҫәрҙәрҙәрендә тыуған ергә мөхәббәт. Т.Ғәниева “Уралиә тигән ил”.Урал тауҙары тураһында белешмә.Р.Ниғмәтиҙең“Йәмле Ағиҙел буйҙары”әҫәрендә Ағиҙел йылғаһына дан. Ә.Вәхитовтың “Аҡһаҡал аманаты” әҫәрендә тыуған ер, халыҡ өсөн көрәш мотивтары.Тыуған ил тураһында мәҡәл-әйтемдәр.
А.Йәғәфәрова “Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар”әҫәрендә ысын дуҫлыҡ.Р.Ғариповтың“Алма”әҫәрендә хеҙмәт темаһы.
Ҡыш. С.Әлибаевтың“Ҡыш”,В.Әхмәҙиевтың“Ҡышҡы урманда”шиғырҙарында ҡышҡы тәбиғәт.Ҡ.Даян “Шыршы шиғырында Яңы йыл.
Башҡорт халыҡ ижады. “Аҡъял батыр”әкиәте.Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Башҡорт халыҡ йырҙары. З.Биишеваның“Йәшәү- хеҙмәт” Ф.Туғыҙбаеваның “Яңы күлдәк” әҫәрҙәрендә хеҙмәткә дан. Д.Бүләковтың “Яралы китап” әҫәрендә ил һаҡлау мәсьәләһе.
Яҙ. Ә.Вәхитовтың “Өс бөртөк бойҙай” хикәйәһендә икмәккә дан. Ә.Әминевтың “Әсикмәк” Ф.Мөхәмәтйәнов “Әсәйем ҡулы”әҫәрҙәрендә хеҙмәт.
Р.Назаровтың“Яҙ килә”, С.Әлибаевтың “Яҙҙы кем килтергән?” шиғырҙарында яҙ миҙгеле. З.Хисмәтуллиндың «Сыйырсыҡ”әҫәрендә ҡоштар тормошо. Башҡорт халыҡ әкиәте “Айыу менән бал ҡорттары”. Ғ.Хисамовтың“Аҡъяурын сал бөркөт”әҫәрендә изгелек һәм яуызлыҡ көрәше.
М.Кәримдең “Өс таған” әҫәрендә кеше сифаттарың бирелеше. А.Игебаевтың “Еңеү көнө “әҫәрендә һалдаттар батырлығы.
Йәй. З.Хисмәтуллиндың “Урман ҡунағы” әҫәрендә тәбиғәтте һаҡлау. М.Ғафури “Һарыҡты кем ашаған?” Мәҫәл һәм аллегория.С.Муллабаевтың“Йомарт йәй” шиғырында йәйге тәбиғәт.Үтелгән темаларҙы ҡабатлау.

6 –сы класс

Уҡыу- белем шишмәһе. Ә.Әхмәт-Хужаның “Алмаш үҫә”шиғырында мәктәп тормошо. У.Кинйәбулатовтың “ Уҡытыусыма” шиғырында мәктәпкә ҡараш, һөйөү тойғоһоноң бирелеше.
Йырым минең- Башҡортостан. Башҡортостан.З. Биишева «Башҡортостан». Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре.Р. Ғарипов. «Дан һиңә, дан, Башҡортостан». Тыуған илем-Башҡортостан. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, хәрефтәре һәм уларҙың дөрөҫ әйтелеше, яҙылышы.Ф.Туғыҙбаева.«Эй яҙмышым минең!». Ш.Бабич. «Башҡортостан»әҫәрҙәрендә Тыуған ил темаһы.
Уҙған ғүмер- ҡалған хәтер. Ә. Усманов.«Башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте»,«Ҡолой кантон» Башҡорт халыҡ йыры. Ғ. Хөсәйенов. «Рудасы Исмәғил Тасим улы» әҫәрендә башҡорт халҡының үткәне, бөгөнгөһө.
Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап. Башҡорт ихтилалдары. М. Иҙелбаев «Хушлашыу» әҫәрендә Салауат Юлаев, Пугачев образдары.Р. Бикбаев. «Салауат ҡылысы» шиғырында тарихи ваҡиғалар. «Салауат». Йырҙа батырға дан йырлау мотивтары.Исемдәрҙең эйәлек категорияһын ҡабатлау. С. Злобин. «Салауат Юлаев» әҫәрендә башҡорттарҙың көнкүреше, йәшәйеше.Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүен ҡабатлау. “Рус- француз һуғышы бәйете”«Любизар», «Кутузов» башҡорт халыҡ йырҙарында Кутузовты данлау. Я. Хамматов. «Төньяҡ амурҙары» әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе.
Уралып ятҡан Уралтау. Башҡортостан тауҙары.Башҡорт халыҡ йыры «Урал». Д.Бураҡаевтың “Урал тауҙары” әҫәрендә еребеҙҙең байлығы.

Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын. Башҡорт халыҡ йыры «Йәмле Ағиҙел буйҙары».
Тәбиғәтте һаҡлау мәсьәләләре.Р. Бикбаев. «Һыуһаным һыуҙар биреғеҙ!»
һыуһаҡлағыстарҙың файҙаһы.
Халыҡ хикәйәләре тураһында төшөнсә. Хаталар өҫтөндә эш.“Йәмле Дим буйы” Дим, Ағиҙел менән Яйыҡ. Халыҡ хикәйәләре тураһында төшөнсә
Тау башында балҡый бер ҡала. Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө.Р. Янбулатова “Гүзәл Өфөм – баш ҡалам”. Өфө ҡалаһының матурлығын данлау.
Башҡорт йолалары. Т. Ҡарамышева “Кәкүк сәйе”. Йолаларҙың тәрбиәүи әһәмиәте.
Башҡорт аштары . М. Өмөтбаев “Башҡорт ҡорото”. Милли аштарға заманса ҡараш.
Әсәм теле- сәсән теле. Башҡорт халыҡ әкиәте “Яҡшы һүҙ–йән аҙығы”.
Башҡорттар китте һуғышҡа. Ҡ. Даян “Шәйморатов генерал”. Я. Хамматов “Башҡорттар китте һуғышҡа” әҫәрендә Тыуған илде һөйөү тойғолары. Я. Хамматовтың “Башҡорттар китте һуғышҡа” әҫәрендә 112-се Башҡорт атлы девизияһының һүрәтләнеүе.
Башҡорт ауыҙ-тел ижады. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. Башҡорт халыҡ әкиәте “Алдар менән Шайтан”.
Боронғо әҙәби ҡомартҡыларыбыҙ. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Ҡол Ғәли “Йософ Ҡиссаһы”. Боронғо яҙма әҙәбиәткә хас үҙенсәлектәрен асыҡлау.
Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, халыҡ яҙыусылары. М. Ғафури. “Бир ҡулыңды”. Р. Ниғмәти. “Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар”.
М. Кәрим “Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа”. Шағирҙарҙың тормош юлы һәм ижады.

7-се класс

Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр тураһында түбән кластарҙа үткәнде иҫкә төшөрөү. Тематик яҡтан әкиәттәрҙең төркөмдәре: тормош-көнкүреш, тылсымлы, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр. Хайуандар тураһындағы әкиәттәр. «Етем төлкө».Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма». Тормош-көнкүреш әкиәттәре «Алтын тамсы». Әкиәттәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү. Исемдәр биреп план төҙөргә өйрәтеү. Әҙәбиәт теорияһы. Эпитет, гипербола, аллегория төшөнсәләрен ҡабатлау. Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Йыр тураһында төшөнсә. Боронғо һәм хәҙерге йырҙар. Оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙар. Йырҙарҙа көй һәм моңдоң әһәмиәте. Тематикаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың төркөмдәргә бүленеше. Халыҡтың рухи тормошонда йырҙың роле. «Урал”, “Ғилмияза” йыры. Таҡмаҡтар тураһында төшөнсә. Бейеү таҡмаҡтары. Уйын таҡмаҡтары. Таҡмаҡтарҙың башҡарылыу үҙенсәлектәре, уларҙың йырҙарҙан айырмаһы.
Алтын көҙ. М.Тажи «Алтын көҙ», Ф.Рәхимғолова «Көҙ» шиғырҙарында көҙгө тәбиғәттең, көҙ билдәләренең һүрәтләнеше. Әҙәбиәт теорияһы: Поэтик телдәге һүрәтләү сараларын ҡабатлау. Метафора тураһында төшөнсә.
Уҡыу - белем шишмәһе . Раил Байбулатов. «Нурлы күҙҙәр». Н.Мусин. «Тайғаҡ баҫма». Әҫәрҙәрҙә дуҫлыҡ, тырышлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ һәм әхлаҡ проблемаларының сағылышы. Хәмзә һәм уҡытыусы, һуғыш ветераны Уғатар ағай образдары. Рәхмәт менән Әсҡәт дуҫлығы. Рәхмәткә хас сифаттар. Хәмзәнең ҡылығын баһалау.
Дуҫлыҡта – берҙәмлек. Б.Бикбай. «Рус теле», Р.Сафин. «Һабаҡташтарыма», М. Кәрим. «Миләш». Был шиғырҙарҙа дуҫлыҡты данлау. Ысын дуҫлыҡты баһалау. Рус һәм башҡорт халҡы араһындағы дуҫлыҡҡа һоҡланыу, ғорурланыу тәрбиәләү. Р.Байбулатов. «Һарыбай». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда дуҫлыҡтың сағылышы. Төп геройҙарҙың характерҙарына хас сифаттар. Ә.Бикчәнтәев. «Бакенщиктар илаҡ булмай». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда батырлыҡтың сағылышы. Ата һәм ул образдары.
Хеҙмәте юҡтың - хөрмәте юҡ.
Иген урыусы комбайнерҙың хеҙмәте. Уйылдан образы. Ж.Кейекбаев. «Оморҙаҡ бабай». Хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Оморҙаҡ бабай образына хас сифаттар.

Башҡортостан-ғәзиз ерем. Ә.Үтәбай. «Башҡортостан» шиғырында лирик геройҙың кисерештәрендә Башҡортостан, Тыуған ил образы. А.Игебаев. «Онотманым һине, ауылым» шиғырында хистәр байлығы, тыуған ерҙең күңелгә яҡын булыуын еткереү. М. Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында» Шиғырҙа ҡайын һәм япраҡ образы.
Башҡортостандың данлы тарихының сағылышы.
Ап-аҡ ҡарҙар яуа. К.Кинйәбулатова. «Һаумы, аҡ ҡыш!» шиғырында ҡыш миҙгеленең, тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше. Ә.Әҫлиуллин. «Биҙәкле сана». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Боронғо сана яһау һөнәренең сағылышы. Имаметдин ҡарттың һөнәре, халыҡ араһындағы абруйы. Әҫәрҙә дуҫлыҡ, татыулык мотивы.
Ил намыҫы - ир күңелендә. Р.Шәкүр. «Һаҡта тора илдең улдары» шиғырында Тыуған илде, тыныслыҡты һаҡлаусы ил улдары образдары. Ф.Аҡбулатова. «Атай икмәге» хикәйәһе. Йөкмәткене үҙләштереү. Әҫәрҙә Бөйөк Ватан һуғышының һүрәтләнеше.
А.Баһуманов. «Юламан». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткәһен үҙләштереү.
Проблемаларына, образдарына характеристика биреү. План төҙөп, план буйынса һөйләргә өйрәнеү.
Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр. Гөлшат Зәйнәшеваның “Йырлайым әсәйҙәр тураһында йыр” шиғырында әсәләргә һөйөү. Ә.Бикчәнтәев. «Яраланған бүре күҙҙәре». Әҫәрҙә әсәнең ҡыҙын үҙаллы тормошҡа әҙерләүе. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһөн үҙләштереү. Һорауҙарға яуап биреү, план төҙөп һөйләргә өйрәнеү
Эх, күңелле яҙ килә! Р.Ниғмәти. «Яҙ килде, яҙ!» шиғырында яҙ килеү менән тәбиғәттең уяныуының, яҙғы эштәр башланыуының һүрәтләнеше. Р.Ғариповтың «Һабантурғай» шиғырында яҙ килтереүсе һабантурғай образы. Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, төп идеяларын асыу.
Тел - тере шишмә . Ҡ.Аралбай. «Башҡорт теле». Идея-тематик йөкмәкеһен үҙләштереү.
Йәмле йәй. М.Ғафури. «Болон» шиғырында йәйге болон матурлығының тасуирланыуы.

8-се класс

Мәктәп – белем шишмәһе. С. Әлибайҙың “ Мәктәп юлы” шиғырында юл образы. Н. Мусиндың “Һабаҡ” әҫәрендә йәйге ялдың һүрәтләнеше. Р. Тимершиндың “Уйлап табыусы” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Логик баҫым. Һөйләү маҡсаты яғынан һөйләм төрҙәре.
Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы. “Ике сәсән”, “Сура батыр” ҡобайырҙарының идея-тематик йөкмәткеһе.
Көҙ – хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле. З. Биишеваның “ Көҙгө ямғыр” Х. Назарҙың “Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын” шиғырҙарында тәбиғәтте тасуирлау. Р. Ханнановтың “Икмәк ҡәҙере”, Р. Өмөтбаевтың “Әмир баҫыуы” әҫәрендә хеҙмәттең әһәмиәте.
Уҡытыусы- ниндәй гүзәл исем. Уҡытыусы һөнәре тураһында әңгәмә.
Башҡортостан – алтын бишек. А. Игебаевтың “Башҡортостан ил генәм”, “Ҡырлас тауҙар иле – Башҡортостан”. И. Кинйәбулатовтың “ Дуҫлыҡ төйәге” шиғырында Тыуған ер образы. Н. Нәжмиҙең “Өфө йүкәләре” шиғырында образдар.
Салауат Юлаев. “Салауат батыр” Ф. Күзбәков “Яу ораны бит һин, Салауат” ҡобайыры. Ф. Рәхимғолова “Салауат”, Т. Дәүләтбирҙина “Салауат рухы” .Я. Хамматовтың “Салауат” романында тарихи осор. Я. Хамматовтың “Салауат” романында Салауат образы.
Ҡыш. Ш. Бабич “Ҡышҡы юлда”, Ф. Рәхимғолова “Ҡыш” шиғырҙары. Б. Рафиҡовтың “Бүреләр” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. И. Теләүембәтовтың “Маралым таңы” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе .А. Йәғәфәрованың “Кескәй шишмә” хикәйәһендә сағылған проблемалар.
Данлы йылдар. М. Кәрим ижады. “Үлмәҫбай” поэмаһында образдар. Үлмәҫбай, Теребай образдарына характеристика. Н. Ғәлиевтың “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Р. Өмөтбаевтың “Генерал Күсимов” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе.

Әсәйем – күңел ҡояшым. Ш. Бикҡолдоң “Әсәйемдең кәңәштәре” шиғырының идеяһы. Т. Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе.
Әҙәп барҙа – иман бар. Х. Назарҙың “Өс һүҙ” шиғырының идеяһы. М. Ямалетдиновтың “Иман” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. З.Ғәлимовтың “Ялан сәскәләре” әҫәрендә атай һәм ул мөнәсәбәтенең сағылышы.
Шаулап, гөрләп яҙ килә. Р. Ғариповтың “Яҙғы йыр”, З. Ураҡсындың “Алмағас” шиғырында тәбиғәттең һүрәтләнеше. Р. Сафиндың “Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе” шиғырында образдар.
Ай Уралым, Уралым! Ҡ. Аралбайҙың “Ер тураһында ете һүҙ”, Б. Бикбайҙың “Ер” шиғырҙарында ерҙе һаҡлау проблемаһы. Өндәш һүҙҙәр һәм улар эргәһендә тыныш билдәләре. Ж. Кейекбаев “Урал тураһында ҡобайыр”. Н. Мусиндың “Һуңғы солоҡ” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Н. Мусиндың “Һуңғы солоҡ” әҫәрендә күтәрелгән проблемалар. К. Шафиҡованың “Уйна, ҡурай!” әҫәрендә ҡурай образы.
Йәй. Ф.Рәхимғолованың “Бал ҡорто һәм күбәләк” шиғырының төп идеяһын асыҡлау.Ш. Янбаевтың “Тегәнәк” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе.. Р. Солтангәрәевтың “Һуңғы һунар” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Ә. Хәмәтдинованың “Йәшел аптека” әҫәрендә үләндәрҙең әһәмиәте.

9-сы класс

Туған тел. Р.Ғариповтың “Тел”, Р Мифтаховтың “Мираҫ”шиғырҙарында телгә һөйөү.Б.Бикбайҙың “Тере шишмәләр”хикәйәһендә күп тел белеүҙең әһәмиәте.
Башҡортостан. Ҡ.Шафиҡованың “Тыуған яҡ”,Р.Мифтаховтың “Күрҙем һине”шиғырҙанда тыуған яҡҡа һөйөү темаһы.М.Әбсәләмовтың “Йомағужа тирәктәре” хикәйәһендә кеше ғүмеренең сағылышы. Ф.Аҡбулатова. Тәбиғәт беҙҙең яҡлауға мохтаж (белешмә).
А.Ғарифуллиндың” Гөрләүек”, З. Алтынбаеваның “Балан”шиғырҙарында тәбиғәт һүрәтләнеше. М.Кәримдең “Айыу мажараһы”хикәйәһендә хайуандарҙың һүрәтләнеше.
В.Ғүмәров. Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үҫемлектәре.. Әҙәби жанр тураһында төшөнсә.Ҡ. Аралбайҙың “ Янғантау”шиғырында иҫтәлекле урындың кеше өсөн әһәмиәте.
Тарих. Ә.Бейеш”Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше”. Роман тураһында төшөнсә.
Ғ.Хисамовтың” Алдар менән Тәфтиләү” романында образдарҙың һүрәтләнеше.
С. Ярмуллиндың” Башҡорт аты”, Т.Ғиниәтуллиндың” Башҡорт аты”хикәйәләрендә кешеләрҙең аттарға ҡарата мөнәсәбәте.Р. Өмөтбаевтың “ Ғилмишәриф” повесында ат менән кешенең ҡаһарманлығы һүрәтләнеүе.Ғ.Вәлиуллиндың “ Ҡәлғә хужаһы һәм тотҡон” белешмәһендә тарихи факттар. Повесть тураһында төшөнсә.
Р.Мифтаховтың“Ҡалҡан”,Р.Назаровтың “Һалдат”шиғырҙарында Ватанға хеҙмәт итеүе һүрәтләнеше.Ә.Үтәбайҙың “ Һаҡмар һыуы аға бит”әҫәренең идея- тематик йөкмәткеһе.
Ә.Үтәбайҙың “ Һаҡмар һыуы аға бит”әҫәрендә Ғәбделбарый образына характеристика.
Н.Асанбаевтың “Ҡыҙыл паша”драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.Н.Асанбаевтың “Ҡыҙыл паша”драмаһында Хәкимовтың образы.
Боронғо әҙәбиәт. “Урал батыр” эпосының идея-тематик йөкмәткеһе, образдар.Ҡол Ғәлиҙең “Йософ Ҡиссаһы”. Йософ образына характеристика.Юрматы ырыуы шәжәрәһе.Шәжәрәләрҙең әһәмиәте. М.Аҡмулланың “Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе”,“ Инсафлыҡ”әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе.
Башҡорт милли аштары,йолалары,байрамдары. Байрамдарыбыҙ тарихынан.З.Әминевтың “Башҡорт һабантуйы”тексында байрамдың һүрәтләнеше.
Сәнғәт.Ш.Бабичтың “Ҡурайҡайға” шиғырында ҡурай образы. Күренекле ҡурайсыларҙың ижади портреттары.
Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы.И.Кинйәбулатовтың “Һеҙҙең йәшәү менән”, Р.Мифтаховтың “ Әсә”шиғырҙарында әсәйҙәргә ҡарата һөйөү. Р.Кинйәбаевтың “Мин ҡайтырмын, әсәй”,

Ә.Еникиҙың “Матурлыҡ” хикәйәләренең йөкмәткеһен үҙләштереү. Әсәйҙәр образына характеристика.
Йәй. Йәйге тәбиғәт билдәләре, үҫемлектәр, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, дарыу үләндәренең шифаһы тураһында һөйләшеү.

Уҡыу курсын үҙләштереү һөҙөмтәләре

Шәхси һөҙөмтәләр:

-башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;

-яҙма телмәрҙәге тыныш билдәләренә иғтибар итеү (һөйләм аҙағындағы өндәү, нөктә, һорау, күп нөктә билдәләренә), һөйләү телмәрендәге интонация, темп, һөйләү тонын айырыу;

-башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интелектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль – этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

-башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау;

-туған телгә ҡарата ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү;

-милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү;

-уҡыу процесында белем алыуға ҡарата яуаплылыҡ булдырыу: тиҫтерҙәреңә, уҡытыусыға ҡарата ихтирамлы булыу;

-башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау;

-мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡараш булдырыу;

-тыуған ил, ер, тел төшөнсәләре тураһында аң-белем биреү;

-үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу;

-һау-сәләмәт йәшәү рәүешен үҙләштереү.

Метапредмет һөҙөмтәләре:

-уҡытыусы ярҙамында дәрескә маҡсат һәм бурыстар ҡуйыу;

-эштәрҙең эҙмә-эҙлеклелеген билдәләү;

-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләргә өйрәнеү;

-үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре араһындағы айырманы аңлата белеү.

-дәреслек, һүҙлек менән эшләү;

-бер информацияны икенсе төр формала бирә белеү;

-текстарға, иллюстрацияға ҡарата бирелгән һорауҙарға яуаптар табыу;

-уҡытыусы менән бергә эшләгән эшкә һығымта эшләү;

-мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу;

-телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү;

-төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу;

-өйрәнелгән морфологик күренештәрҙе текстан таба һәм аңлата белеү;

-синтаксик-стилистик күнегеүҙәр башҡарыу.

-бәйләнешле һөйләмдәр, бәләкәй текст күләмендә үҙ фекерен белдереү;

-һүҙҙәрҙе аңлы, тасуири, дөрөҫ уҡыу;

-үҙ-үҙеңде, класташыңды баһалау;

-бирелгән тема буйынса диалог төҙөү; диалогты дауам итеү;

-текстағы образлы һүҙҙәрҙе, һүрәтләү – тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ итеп ҡулланыу;

-тыңлаған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә һөйләй алыу;

-башҡаларҙың телмәрен тыңлап аңлау, аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлау;

-бәйләнешле һөйләмдәр, бәләкәй текст күләмендә үҙ фекерен белдереү.

Предмет һөҙөмтәләре:

-һүҙҙәрҙә өндәрҙе дөрөҫ әйтеү, ижеккә бүлеү, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙе асыҡлай белеү;

-һүҙҙе юлдан юлға күсерергә ижектәргә дөрөҫ бүлеү;

-һүҙҙәргә өн анализы яһай белеү;

-һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, тексты дөрөҫ, матур күсереү, күсергәнде өлгө буйынса тикшерә белеү;

-һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, тексты диктант итеп яҙа белеү;

-кеше исемдәрен, фамилияларын, географик атамаларҙың исемдәрен ҙур хәреф менән яҙа белеү;

-һүҙҙәргә һорау бирә белергә, һөйләмдә нимә йәки кем тураһында һүҙ барғанын белеү;

-һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөй белеү;

-картина буйынса ҙур булмаған хикәйә төҙөү; уҡытыусы ярҙамында был хикәйәне яҙыу;

-класташтың яҙғанын һәм үҙ яҙмаларын тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре;

-башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, хәрефтәре, уларҙың дөрөҫ әйтелеше өҫтөндә эшләү;

-үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен белеү, практик ҡулланыу;

-исемдәрҙең һан, эйәлек, килеш һәм хәбәрлек категориялары менән үҙгәртеү үҙенсәлектәрен белеү;

-үҙ аллы һүҙ төркөмдәре булараҡ исем, сифат, һан, ҡылым, алмашты өйрәнеү, практик ҡулланыу, улар араһындағы айырманы аңлата белеү;

-ҡылым һөйкәлештәрен, затлы һәм затһыҙ, барлыҡ – юҡлыҡ формаларын,ҡылым төркөмсәләрен өйрәнеү;

-ҡылымдың күләм һәм йүнәлеш категориялары менән практик танышыу;

-ярҙамсы һүҙ төркөмө булараҡ теркәүес,бәйләүес, киҫәксә, мөнәсәбәт һүҙҙәр, ымлыҡтар тураһында белешмә алыу, практик ҡуллана белеү.

-һүҙбәйләнештәр, уларҙың яһалышы һәм төҙөлөшө үҙенсәлектәрен белеү;

-эйә менән хәбәрҙе билдәләү; эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ ҡуйылыуын аңлата белеү;

-һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айыра белеү;

-ике составлы, бер составлы, кәм һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең принциптарын өйрәнеү;

-һүҙ төркөмдәре һәм һөйләм киҫәктәре араһындағы айырманы аңлата белеү;

-төрлө типтағы ябай һөйләмдәр төҙөү күнекмәләрен нығытыу, уларҙы яҙма һәм һөйләү телмәрендә файҙаланыу, дөрөҫ интонация менән уҡыу;

-тыныш билдәләренең дөрөҫ ҡуйылышын нығытыу;

-теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе айыра белеү;

-эйәрсән һөйләм төрҙәрен өйрәнеү;

-ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр һәм күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрменән танышыу;

-өйрәнелгән грамматик материалды практик ҡуллана белеү;

-һыҙыҡ, нөктәле өтөр, ике нөктәнең ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙә ҡуйылыу осраҡтарын өйрәнеү;

Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙең үҙләштерелеүен баһалау:

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

-башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;

-тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);

-тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, триместр йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында диктант, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәрестә, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана.

Тематик планлаштырыу

5-се класс

Бүлектәр	Сәғәт һаны
Башҡорт халыҡ ижады	2
Тыуған яҡ киңлектәре	7
Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, йомаҡтар һәм йырҙар	4
Ҡышҡы тәбиғәт	6
Яҙ. Яҙғы эштәр	4
Еңеүселәр	4
Мәҫәлдәр	2
Йәй саҡыра	5
Бөтәһе	34

6-сы класс

Бүлектәр	Сәғәт һаны
Уҡыу – белем шишмәһе	2
Үҙған ғүмер – ҡалған хәтер	9
Төньяҡ амурҙары	4
Уралып ятҡан Уралтау	2
Башҡорт йолалары	2
Башҡорттар китте һуғышҡа	11
Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары	4
Бөтәһе	34

7-се класс

Бүлектәр	Сәғәт һаны
Башҡорт халыҡ ижады	7
Алтын көҙ	3
Уҡыу-белем шишмәһе	2
Дуҫлыҡта-берҙәмлек	4

Хеҙмәте юҡтың- хөрмәте юҡ	3
Башҡортостан-ғәзиз ерем	3
Ап-аҡ ҡарҙар яуа	3
Ил намыҫы – ир күңелендә	3
Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр	2
Эх, күңелле яҙ килә!	4
Бөтәһе	34

8-се класс

Бүлектәр	Сәғәт һаны
Мәктәп – белем шишмәһе	3
Халыҡ ижады –халыҡ хазинаһы	1
Көҙ – хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле	2
Уҡытыусы – ниндәй гүзәл исем	1
Башҡортостан – алтын бишек	1
Салауат Юлаев	1
Ҡыш	2
Данлы йылдар	4
Әсәйем – күңел ҡояшым	3
Әҙәп барҙа –иман бар	3
Шаулап – гөрләп яҙ килә	2
Ай, Уралым, Уралым!	4
Йәй	7
Бөтәһе	34

Календарь - тематик планлаштырыу

5-се класс

№	Дәрес темаһы	Бөтәһе	Контроль эш	Практик эш
1	Халыҡ ауыҙ- тел ижады, төрҙәре. "Әминбәк" әкиәтенең идея - тематик йөкмәткеһе, образдар характеристикаһы	1	0	0
2	"Аҡъял батыр" әкиәтенең идея-тематик йөкмәткеһе, образдар системаһы	1	0	0
3	Т.Ғәниева. "Уралиә тигән ил" әкиәтенең идея -	1	0	0

	тематик йөкмәткеһе. Башҡортостан тауҙары			
4	С.Муллабаев. "Шатлыҡлы иртә".	1	0	0
5	Б.Ноғоманов. “Йәйбикә менән Көҙбикә”, Р. Ғарипов. “Торналар шығырҙарында көҙгө тәбиғәт әҫәрҙәрендә тәбиғәт күренештәре.	1	0	0
6	Ф.Иҫәнғоловтың ”Йылмайыу” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. А.Йәғәфәрова. “Яҡшылыҡ”. Әкиәттә Фәрит менән Фәһим образдары	1	0	0
7	Н. Әминева "Тыуған ер". “Тыуған ер” ҡобайыры. Р.Ниғмәти. "Йәмле Ағиҙел буйҙары", Ф.Рәхимғолова. "Мин Башҡортостандан”. Әҫәрҙәрҙә тыуған яҡты данлау мотивтары	1	0	0
8	Ә.Вәхитов. "Аҡһаҡал аманаты". Әҫәрҙәрҙә тарихи осор	1	0	0
9	Ғ.Хисамов. “Аҡьяурын сал бөркөт” әҫәрендә Аҡҡолай образына характеристика	1	0	0
10	Ауыҙ-тел ижадының афористик жанрҙары. Мәҡәлдәр, Әйтемдәр	1	0	0
11	Афористик ижад төрө булараҡ йомаҡтар	1	0	0
12	Башҡорт халыҡ йырҙары	1	0	0
13	“Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, йомаҡтар һәм йырҙар” темаһын ҡабатлау	1	0	0
14	С.Әлибаев. "Ҡыш", В.Әхмәҙиев. "Ҡышҡы урманда". Шиғырҙарҙа ҡыш миҙгеленең һүрәтләнеше	1	0	0
15	Н.Мусин. "Ҡоралайҙар"әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе	1	0	0
16	Н.Мусин. "Ҡоралайҙар". Әҫәрҙә Әбделнәғим бабай образының характеристикаһы	1	0	0
17	“Ҡамыр батыр” әкиәтендә батырҙар образы. Сағыштырыу тураһында төшөнсә	1	0	0
18	“Кәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән" әкиәтенең идея-тематик йөкмәткеһе	1	0	0
19	Кәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән" әкиәтендә образдарға характеристика	1	0	0
20	Р.Назаров “Яҙ килә”, С.Әлибаев “Яҙҙы кем килтергән?” шиғырҙарында тәбиғәт һәм кеше образдары. Йәнләндереү тураһында төшөнсә	1	0	0
21	Б.Ноғоманов. "Ҡарһылыу менән Яҙһылыу" әкиәттәрендә хеҙмәт темаһы	1	0	0
22	Башҡортостан ҡоштары. З.Хисмәтуллин “Сыйырсыҡ”, Ҡ.Даян “Торналар” әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе.	1	0	0
23	М.Кәрим. “Һеңлемдең төшө”. Әҫәрҙә әсәй образы	1	0	0
24	А.Игебаев. "Еңеү көнө". Шиғырҙар ватансылыҡ тойғоһоноң сағылышы	1	0	0
25	Р.Ниғмәти. “Еңеүселәргә дан!”. Батырҙарға дан йырлау	1	0	0

26	К.Мәргән. “Ҡурайсының үлеме” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе	1	0	0
27	Минең олатайым	1	0	0
28	Мәҫәл тураһында төшөнсә. М.Ғафури. “Һарыҡты кем ашаған?” әҫәрендә ғәҙелһеҙлек төшөнсәһе	1	0	0
29	Л.Толстой. “Ике иптәш” әҫәрендә образдарға характеристика	1	0	0
30	Йәйге көндәр көтә. С. Муллабаев. “ Йомарт йәй” шиғырында йәйге тәбиғәт	1	1	0
31	Йомғаҡлау тикшереү эше. З.Хисмәтуллин. “Урман ҡунағы” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе	1	1	0
32	З.Хисмәтуллин. “Урман ҡунағы” әҫәрендә тәбиғәтте һаҡлау. Хаталар өҫтөндә эш	1	0	0
33	С.Агиш. “Турыҡай” әҫәрендә Турыҡайға характеристика	1	0	0
34	Үтелгәндәрҙе дөйөмләштереү, йомғаҡлау	1	0	0
	Бөтәһе	34	1	0

6-сы класс

№	Дәрес темаһы	Бөтәһе	Контроль эш	Практик эш
1	Һаумы, мәктәп!Ә.Әхмәт–Хужа.“Алмаш үҫә” К.Кинйәбулатованың “Уҡытыусыма”, шиғырҙарында мәктәп темаһы	1	0	0
2	Т.Дәүләтбирҙина “Миҙгелдәр” шиғырының идея-тематик йөкмәткеһе	1	0	0
3	Йырым минең – Башҡортостан!. Биишева. “Башҡортостан”, Р.Ғарипов “Дан һиңә, дан, Башҡортостан” Ш.Бабич “Башҡортостан”, Ғ. Хөсәйенов “Мөкәддәс”. Әҫәрҙәрҙә тыуған ергә һөйөү	1	0	0
4	Тыуған ил тарихы. Н.Нәжми. “Һинең ниндәй улыңмын мин?”, Ә.Усманов. “Башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте” әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе	1	0	0
5	Ғ.Хөсәйенов. “Рудасы Исмәғил Тасим улы” әҫәрендә белемгә яңы ҡараш	1	0	0
6	Т. Ҡарамышева “Малайҙар”, Л.Толстой “Кешегә күпме ер кәрәк?” әҫәрҙәрендә уяулыҡ темаһы	1	0	0
7	Ә. Хәкимов “Езүкәй янында”. Әҫәрҙә башҡорт халҡының боронғо тормошо	1	0	0
8	Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап. Башҡорт ихтилалдары. Башҡорт әҙәбиәтендә Салауат Юлаев һәм ихтилалдар темаһы	1	0	0
9	М.Иҙелбаевтың “Хушлашыу”, Р.Бикбаев. “Салауат ҡылысы” әҫәрҙәрендә Салауат	1	0	0

	образы			
10	С.Злобиндың “Салауат Юлаев”. Ғ.Ибраһимов. “Сапҡын” әҫәрҙәрендә Салауат образы	1	0	0
11	Уҙған ғүмер – ҡалған хәтер	1	0	0
12	Башҡорт әҙәбиәтендә 1812 йылғы Ватан һуғышы темаһы.	1	0	0
13	Бәйет тураһында төшөнсә. Рус – француз һуғышы бәйете	1	0	0
14	Я. Хамматовтың “Төньяҡ амурҙары” романында башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте	1	1	0
15	Риүәйәт тураһында төшөнсә. “Ҡаһым түрә” риүәйәте	1	0	0
16	Минең ерем – Уралтау. Д. Бураҡаев “Урал тауҙары”. Башҡорт халыҡ йыры “Урал”, Р.Бикбаев. “Уралыма” шиғырҙарында Башҡортостан тәбиғәте	1	0	0
17	Я. Хамматов. “Самородок”. Өҙөктә тарихи осор. Образдар системаһы	1	0	0
18	Тәбиғәт менән берлектә. А. Ҡобағошов. “Ҡарға бутҡаһы тәмлеме?”, Т. Ҡарамышева. “Кәкүк сәйе” әҫәрҙәрендә башҡорт йолалары	1	0	0
19	С.Агиш. “Ҡунаҡ һәм намыҫ”. Ф.Туғыҙбаева. “Һыу юлы”. Әҫәрҙәрҙә йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр	1	0	0
20	Башҡорт халҡының батырҙары. Я.Хамматов. “Башҡорттар китте һуғышҡа”. Өҙөктә кавалеристарҙы һынландырыу	1	0	0
21	Легендар Шәйморатов генерал. Ҡ.Даян “Шәйморатов генерал”	1	0	0
22	Ә.Бикчәнтәевтың “Бөркөт һауала үлә”, Р.Насировтың “ Ил балаһы Шәкирйән” әҫәрҙәрендә А.Матросов образы	1	0	0
23	“Урал батыр” әкиәтендә яҡшылыҡ менән яманлыҡ сифаттары	1	0	0
24	“Алдар менән шайтан”, “Ҡурай моңо” әкиәттәрендә тапҡырлыҡ. Көләмәстәр	1	0	0
25	ТҮ Инша “Минең яратҡан әкиәтем”	1	0	0
26	Ҡол Ғәли. “Йософ ҡиссаһы” әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе	1	0	0
27	“Ҡармасан менән Сәрмәсән” риүәйәте. Ҡармасан менән Сәрмәсән образдарына характеристика	1	0	0
28	С.Юлаев. “Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...”, “Ҡарабай менән Сарыбай”(Ҡуҙыйкүрпәс повесынан өҙөк). Батырҙарға характеристика	1	0	0
29	XIX быуат мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулла. “Нәсихәттәр”. Әҫәрҙә әҙәп, әхлаҡ темаһы	1	0	0
30	Йомғаҡлау тикшереү эше. Сәсәндәр ижады. Һабрау, Ҡобағош, Байыҡ сәсәндәр әйтештәре.	1	1	0
31	Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм	1	0	0

	яҙыусылары. Хаталар өҫтөндә эш			
32	З.Биишева “Сынаяҡ уйнатыу”. Текста һүрәтләнгән осор	1	0	0
33	Ә.Хәкимов “Сәләх ҡарт”. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе	1	0	0
34	Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, йомғаҡлау	1	0	0
	Бөтәһе	34	1	0

7-се класс

№	Дәрес темаһы	Бөтәһе	Контроль эш	Практик эш
1	Халыҡ ижады тураһында төшөнсә. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар.	1	0	0
2	Башҡорт халыҡ әкиәттәре.”Әминбәк” әкиәтендә һөнәрҙәр темаһының бирелеше.	1	0	0
3	Хайуандар тураһында әкиәттәр. “Етем төлкө”.	1	0	0
4	Тылсымлы әкиәттәр.”Алтын алма”	1	0	0
5	Риүәйәттәр һәм легендалар. Халыҡ хикәйәләре.	1	0	0
6	Халыҡ йырҙары.”Урал” йырында Тыуған ил темаһы.	1	0	0
7	“Зөлхизә” һәм “ Ғилмияза” йырҙарында ҡатын-ҡыҙҙарҙың әсе яҙмышы.	1	0	0
8	М.Тажиҙың “Алтын көҙ”шиғырында көҙ биҙәктәре.	1	0	0
9	Ф.Рәхимғолованың “Көҙ”шиғырының идея-тематик йөкмәткеһе.	1	0	0
10	Көҙ темаһына һынамыштар	1	0	0
11	Р.Байбулатов.“Күңел күҙҙәре”әҫәрендә белемгә ынтылыш.	1	0	0
12	Н.Мусин.Тайғаҡ баҫма.	1	0	0
13	Баязит Бикбайҙың “Рус теле”, Рафаэль Сафиндың “Һабаҡташтарыма” шиғырҙарында халыҡтар дуҫлығы.	1	0	0
14	Мостай Кәримдең ”Миләш”әҫәрендә дуҫлыҡ ҡиммәте.	1	0	0
15	Раил Байбулатовтың ”Һарыбай” хикәйәһендә кешеләр араһындағы мөнәсәбәт.	1	0	0
16	Ә.Бикчәнтәевтың“Бакенщиктар илаҡ булмай”әҫәрендә дуҫлыҡ, тоғролоҡ төшөнсәләре.	1	0	0
17	Мәжит Ғафуриҙың “Гөлдәр баҡсаһында”, Мәүлит Ямалетдиновтың “Ураҡ өҫтө” шиғырҙарында хеҙмәт темаһының асылышы	1	0	0
18	Ж.Кейекбаев.Оморҙаҡ бабай.	1	0	0
19	Хеҙмәт темаһына мәҡәлдәр.	1	0	0
20	Әхмәр Үтәбайҙың “Башҡортостан” шиғырында Тыуған илгә һөйөү.	1	0	0
21	Мостай Кәримдең “Ҡайын япрағы тураһында”	1	0	0

	шиғырында еребеҙ матурлығы.			
22	А.Игебаевтың “Онотманым һине, ауылым!”шиғырында һағыныу тойғоһо.	1	0	0
23	Кәтибә Кинйәбулатованың ”Һаумы, аҡ ҡыш!», Сафуан Әлибаевтың “Матур көн”шиғырҙарында ҡыш биҙәктәре.	1	0	0
24	Әхмәт Әһлиуллиндың “ Биҙәкле сана” хикәйәһендә заман үҙгәреше, быуындар бәйләнеше.	1	0	0
25	Ҡыш тураһында мәҡәлдәр, йомаҡтар.	1	0	0
26	Рәшит Шәкүрҙең “Һаҡта тора илдең улдары”шиғырында батырлыҡ темаһы.	1	0	0
27	Ф.Аҡбулатованың”Атай икмәге”хикәйәһенең идея- тематик йөкмәткеһе.	1	0	0
28	А.Баһумановтың “Юламан “хикәйәһендә герой яҙмышы.	1	0	0
29	Гөлшат Зәйнәшеваның “Йырлайым әсәйҙәр тураһында йыр” шиғырында әсәләргә һөйөү.	1	0	0
30	Әнүәр Бикчәнтәевтың “Яраланған бүре күҙҙәре” хикәйәһендә әсә хәстәрлеге.	1	0	0
31	Рәшит Ниғмәтиҙең “Яҙ килде, яҙ!,” Рәми Ғариповтың “Һабантурғай” шиғырҙарында яҙ билдәләре**.**	1	0	0
32	Үтелгән темалар буйынса контроль эш.	1	1	0
33	. Хаталар өҫтөндә эш .Ҡ.Аралбаевтың “Башҡорт теле”шиғырында телгә һөйөү.	1	0	0
34	Мәжит Ғафуриҙың” Болон” шиғырында йәй темаһы.	1	0	0
	Бөтәһе	34	1	0

8-се класс

№	Дәрес темаһы	Бөтәһе	Контроль эш	Практик эш
1	Мәктәп – белем шишмәһе	1	0	0
2	Уҡыусыларҙың йәйге каникулдары	1	0	0
3	Изгелек эшләргә ашығығыҙ. Р. Тимершин. Уйлап табыусы	1	0	0
4	Ҡобайырҙар.“Сура батыр” ҡобайыры	1	0	0
5	Көҙ билдәләре	1	0	0
6	Икмәк бөтәһенә лә баш. Художестволы әҫәрҙең композицияһы	1	0	0
7	Уҡытыусы һөнәре	1	0	0
8	Башҡортостан – дуҫлыҡ төйәге	1	0	0
9	Салауат Юлаев – милли батырыбыҙ	1	0	0
10	Ҡышҡы тәбиғәт	1	0	0
11	Ҡыш тураһында шиғырҙар	1	0	0
12	М.Кәримдең “Үлмәҫбай” поэмаһында халыҡ ижады алымдары	1	0	0
13	Н.Ғәлимов. “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай”әҫәрендә ҡурай образы	1	0	0

14	Башҡорттарҙың Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуы.	1	0	0
15	В.Шукшиндың әҫәрҙәрендә Бөйөк Ватан һуғышының сағылышы	1	0	0
16	Ш.Бикҡол.”Әсәйемдең кәңәштәре” шиғыры	1	0	0
17	Әсә һәм бала мөнәсәбәте.	1	0	0
18	Мәрхәмәтле әсәләр һәм рәхмәтһеҙ балалар	1	0	0
19	Әҙәп барҙа –иман бар	1	0	0
20	Ғаиләлә ата –әсәй менән бала мөнәсәбәте	1	0	0
21	Сәскәләр – тәбиғәт биҙәге	1	0	0
22	Яҙ миҙгеле билдәләре	1	0	0
23	Еңеү көнө ниндәй тойғолар уята?	1	0	0
24	Минең Ватаным.	1	0	0
25	Уралтау байлыҡтары	1	0	0
26	Н.Мусиндың “Һуңғы солоҡ”әҫәрендә экологик мәсьәләләр.	1	0	0
27	Башҡортостан тәбиғәте” темаһына инша	1	1	0
28	Хаталар өҫтөндә эш. Йәйге тәбиғәт билдәләре	1	0	0
29	Үҫемлектәр	1	0	0
30	Һыу- тәбиғи байлығыбыҙ	1	0	0
31	“Тәбиғәт һәм кеше” темаһына проект эше.	1	0	0
32	Дарыу үләндәре	1	0	0
33	Минең яратҡан яҙыусым.	1	0	0
34	Үтелгән темаларҙы йомғаҡлау.	1	0	0
	Бөтәһе	34	1	0

9-сы класс

№	Дәрес темаһы	Бөтәһе	Контроль эш	Практик эш
1	Р.Ғариповтың “Тел”, Р Мифтаховтың “Мираҫ”шиғырҙарында телгә һөйөү.	1	0	0
2	Б.Бикбайҙың “Тере шишмәләр”хикәйәһендә күп тел белеүҙең әһәмиәте.	1	0	0
3	Ҡ.Шафиҡованың “Тыуған яҡ”,Р.Мифтаховтың “Күрҙем һине”шиғырҙарында тыуған яҡты һөйөү	1	0	0
4	М.Әбсәләмовтың “Йомағужа тирәктәре” хикәйәһендә кеше ғүмеренең сағылышы.	1	0	0
5	Ф.Аҡбулатова.Тәбиғәт беҙҙең яҡлауға мохтаж. А.Ғарифуллиндың ”Гөрләүек”,З. Алтынбаеваның “Балан”шиғырҙарында тәбиғәт һүрәтләнеше.	1	0	0
6	М.Кәримдең “Айыу мажараһы”хикәйәһендә хайуандарҙың һүрәтләнеше.	1	0	0
7	В.Ғүмәров. Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үҫемлектәре. Әҙәби жанр тураһында төшөнсә.	1	0	0

8	Тыуған яғым- алтын бишек	1	0	0
9	Ҡ. Аралбайҙың “Янғантау”шиғырында иҫтәлекле урындың кеше өсөн әһәмиәте.	1	0	0
10	Ә.Бейеш ”Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше”. Роман тураһында төшөнсә.	1	0	0
11	Ғ.Хисамовтың” Алдар менән Тәфтиләү” романында образдарҙың һүрәтләнеше.	1	0	0
12	С. Ярмуллиндың” Башҡорт аты”, Т.Ғиниәтуллиндың” Башҡорт аты” хикәйәләрендә кешеләрҙең аттарға ҡарата мөнәсәбәте.	1	0	0
13	Р. Өмөтбаевтың “ Ғилмишәриф” повесында ат менән кешенең ҡаһарманлығы	1	0	0
14	Ғ.Вәлиуллиндың “Ҡәлғә хужаһы һәм тотҡон” белешмәһендә тарихи факттар.Повесть тураһында төшөнсә.	1	1	0
15	Р.Мифтаховтың“Ҡалҡан”,Р.Назаровтың “Һалдат”шиғырҙарында Ватанға хеҙмәт итеүе һүрәтләнеше.	1	0	0
16	Ә.Үтәбайҙың “ Һаҡмар һыуы аға бит”әҫәренең идея- тематик йөкмәткеһе	1	0	0
17	Ә.Үтәбайҙың “ Һаҡмар һыуы аға бит”әҫәрендә Ғәбделбарый образына характеристика.	1	0	0
18	Н.Асанбаевтың “Ҡыҙыл паша”драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.	1	0	0
19	Н.Асанбаевтың “Ҡыҙыл паша”драмаһында Хәкимов образы.	1	0	0
20	Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне.Байыҡ сәсәндең шәхесе.	1	0	0
21	Ҡол Ғәлиҙең “Йософ Ҡиссаһы”. Йософ образына характеристика.	1	0	0
22	Юрматы ырыуы шәжәрәһе. Шәжәрәләрҙең әһәмиәте.	1	0	0
23	М.Аҡмулланың “Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе”, “Инсафлыҡ”әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе.	1	0	0
24	«Байрамдарыбыҙ тарихынан» темаһына проект эше	1	0	0
25	Ш.Бабичтың “Ҡурайҡайға” шиғырында ҡурай образы. Күренекле ҡурайсыларҙың ижади портреттары	1	0	0
26	И.Кинйәбулатовтың “Һеҙҙең йәшәү менән”, Р.Мифтаховтың “ Әсә”шиғырҙарында	1	0	0

	әсәйҙәргә ҡарата һөйөү.			
27	Әсәйҙәргә рәхмәт әйтәйек	1	0	0
28	Ә.Моратовтың “Тере хәтер”,Р.Мифтаховтың “Боҙло ҡуҙ” шиғырҙарында һуғыш темаһы.	1	0	0
29	Ж.Кейекбаевтың “Зөбәй Үтәғолов” хикәйәһендә батырлыҡ темаһы.	1	0	0
30	М.Кәримдең “Малайҙар”хикәйәһенең йөкмәткеһе. Анастас менән Младен образдарына характеристика	1	0	0
31	Ш.Янбаевтың “ Йәнекәй ҡарт” хикәйәһенең идея –тематик йөкмәткеһе. Әкрәм менән Раяндың дуҫлығы.	1	0	0
32	Әҙәби процесс тураһында төшөнсә. Үтелгән темалар буйынса тест.	1	!	0
33	Н.Нәжмиҙең “ Дан иле, яҙ иле”, Х.Ғиләжевтың “ Россияға йыр” шиғырҙарында халыҡтар дуҫлығы.	1	0	0
34	Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.	1	0	0
	Бөтәһе	34	!	0

Мәғлүмәт ресурстары

1. Башҡорт телен үҙ аллы өйрәнеү өсөн «Интерактив башҡорт теле» веб-ресурсы// URL: https://bashlang.ru/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 17.05.2022).
2. Балаларҙы өсөн «Балалар» интернет-порталы// URL: https://balalar.org/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 17.05.2022).
3. «Башкортостан» телерадиокомпанияһының «Тамыр» балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы // URL: https://bash.news/bst (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 18.05.2022).
4. Башкортостан Республикаһының мәғлүмәт порталы // URL: https://www.bashkortostan.ru/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 18.05.2022).
5. Башкортостандың мәҙәни донъяһы // URL: http://ebook.bashnl.ru/dsweb/HomePage (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 23.04.2022).
6. Башҡорт теленә өйрәтеүсе халыҡ-ара дистанцион система // URL: https://region.bspu.ru/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 23.04.2022).
7. Русса-башҡортса онлайн һүҙлек // URL: https://huzlek.bashqort.com/ (мөрәжәғәтитеү ваҡыты 23.04.2022).
8. Башҡорт телен үҙ аллы өйрәнеү өсөн ҡулланма // URL: https://elib.bashedu.ru/dl/read/VahitovaSamouchBashkYaz.pdf/info (мөрәжәғәт

итеү вакыты 23.04.2022).

9. ЯКласс платформаһы // URL: https://www.yaklass.ru/p/bashkirskiy_ya (мөрәжәғәт итеү вакыты 10.06.2022).

10. Башҡортса-русса һәм русса-башҡортса тәржемәсе : https://bashkortsoft.ru/. (мөрәжәғәтитеү вакыты 10.06.2022)